*Ғиндулла ШӘЙӘХМӘТОВ,*
*Рәсәй мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы*

# ЖӘЛИЛ КЕЙЕКБАЕВ МӘКТӘБЕ

Күп телдәрҙе белгән ғалим, сәсән телле әҙип Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына 2001 йылдың 25 октябрендә 90 йыл туласаҡ. Жәлил ағайға үҙенең 50 йәшлек юбилейын ғына күрергә насип булды. Башҡорт дәүләт университетында ул иҫән саҡта башҡорт филологияһы факультетын тамамлаусыларҙың һәр береһен «Кейекбаев мәктәбен үткән» тиҙәр. Әммә ул «мәктәптә», ул бүләк иткән «Урман әкиәттәрендә» хәҙерге быуын кешеләре лә уҡый, ул төҙөгән «Башҡорт теленең орфографияһы, фонетикаһы, лексикаһы, фразеологияһы»нан һабаҡ алалар. Тимәк, уның замандаштары беҙ генә түгел, бөгөн уҡыған һәр бала, һәр үҫмер, һәр зыялы Жәлил ағай Кейекбаевҡа туранан-тура бурыслы.

Ваҡыт аҡҡан һыу һымаҡ, халҡыбыҙҙың бик тә ҡатмарлы, үтә лә тетрәндергес хәлваҡиғаларын, һәләкәтле ғүмерен быуаттар төпкөлөнә йәшерә бара, тарих туҙанына күмә. Исемдәр, ваҡиғалар хәтерҙән китә. Ошо онотолоу юлында берҙән-бер сара, кәртә булып музейҙар тора. Фәҡәт музейҙар ғына быуындар хәтерен һаҡлай.

Сәйетбаба урта мәктәбе Ж. Кейекбаевтың исемен 1969 йылдан бирле йөрөтә. Ә ғалимдың тыуған ауылында — Ҡаранйылғала — Йорт-музей асылыуға 8 йыл үтеп китте. Хәҙер әҙиптең 90 йыллығына ҡарата музейҙың экспонанттарын барлау, яңыларын әҙерләү эштәре бара.



*Йорт-музейҙың тышҡы күренеше*

Был музей нисек барлыҡҡа килде һуң? Нисек ойошторолдо? Был һорауҙарҙы музейыбыҙға килеүселәрҙең күптәре биргәне булды. Уларға бер нисә һүҙ менән генә яуап биреүе лә мөмкин түгелдер.

Уны ойоштороуҙа иң күп ярҙам итеүселәрҙең береһе — ул саҡта «Йондоҙ» колхозы рәйесе Аҙнабай Сәғит улы Йәноҙаҡов булғандыр, тип уйлайым.

Жәлил ағайҙың мәрхүм булып ҡалыуын ишетеп, бик тә болоҡһоп йөрөгән саҡ. Аҙнабай Сәғит улы мине бер көндө идараға саҡырҙы. Уның эш бүлмәһендә Жәлил ағайҙың иҫтәлеген нисек итеп мәңгеләштереү хаҡында кәңәшләшеп ултырҙыҡ. Ул миңә: «Ғиндулла ағай, һин ошо мәсьәләнең мөһимлеген, кәрәклеген дәлилләп идара исеменә аңлатма яҙып килтер әле, ҡалғаны минең хәстәрлегем булыр», — тине ул.

Ғариза-аңлатманы тиҙ яҙып килтерҙем. Шуның нигеҙендә, күрәһең, тиҙҙән мәктәп партия ойошмаһының, колхоз профкомы һәм идараһының берлектәге йыйылышы үткәрелде. Йыйылышта был эштең миңә тапшырыуҙарын һораным.

Ж.Ғ.Кейекбаевҡа музей асыу өсөн түбәндәге сәбәптәр нигеҙ булды. Беренсенән, Ж.Ғ.Кейекбаев оло фән юлына сыҡҡанға тиклем башланғыс белемде Сәйетбаба мәҙрәсәһендә ала. 1942—43 йылдарҙа ул ошо мәктәптә директор һәм немец теле уҡытыусыһы булып эшләй. Ә ауылға күсеп килеүенең төп сәбәбен ул шулай аңлата: «Иң мөһиме, миңә хәҙер халыҡтың йәнле һөйләшеү теленә мөмкин тик-

лем яҡынырaҡ булырға кәрәк. Ни өсөн тиһәң, мин башҡорт телендә әҙәби әйтелеш (орфоэпия) проблемаһы өҫтөндә эшләйем. Быны ғилми яҡтан эшләп сығаһы бар».

Эште ғалимдың ғаиләһенә, ҡәләмдәштәренә хат яҙыу менән башлап ебәрҙек. Яуап тиҙ килде, Жәлил ағайҙың ҡатыны Нәфисә Хәлил ҡыҙы, беҙҙең ниәттәребеҙҙе үҙ итеп, хат яҙҙы. 1972 йылдың июнь баштары ине, мәктәп директоры Барый Зәкир улы Исламов (уның был вазифаға яңы ғына билдәләнгән сағы) менән мәктәп машинаһында ғалимдың ғаиләһенә юл тоттоҡ.

Ҡыуанысыбыҙҙың сиге булманы. Тәүге осрашыуҙа уҡ Ж.Ғ. Кейекбаевтың ижад архивынан байтаҡ фотолар, ҡулъяҙмалар, илебеҙҙең төрлө юғары уҡыу йорттарына лекциялар һөйләргә барған саҡта туғандаш халыҡтарҙың әҙиптәре, ҡәләмдәш дуҫтары тарафынан уға бүләк итеп бирелгән әйберҙәрен алдыҡ. Был әйберҙәр әле ул саҡта томанлы ғына булып күҙ алдына баҫҡан буласаҡ музейыбыҙ өсөн иң ҡәҙерле экспонаттар ине.

1974 йылдың 25 октябрендә, ниһайәт, Сәйетбаба урта мәктәбе бинаһында ғалим иҫтәлегенә музей асылды һәм иҫтәлекле мәрмәр таҡтаташ ҡуйылды.

1977 йылдың 17 мартында музейға тантаналы шарттарҙа 2767-се һанлы «Мәктәп музейы» тигән таныҡлыҡ тапшырылды.

Шунан бирле мәктәп музейы йылдан-йыл байыны, яңынан-яңы экспонаттар менән тулыландырылды. Мәҫәлән: «Ж.Ғ. Кейекбаев туғандары менән», «Ғалим яҡын дуҫтары араһында», «Замандаштары һәм ғалимдар Ж.Кейекбаев тураһында», «Күренекле ғалим — телселәр, әҙәбиәтселәр — Ж.Ғ.Кейекбаевтың уҡыусылары», «Аҡ елкәнлеләр», «Халыҡҡа хеҙмәт итеүҙә тоғролоҡ өлгөһө» кеүек экспозициялар урын алған музейҙа.

Күп экспонаттар Ж.Ғ.Кейекбаевтың дуҫтары тарафынан бүләк ителде.

Мәшһүр яҡташыбыҙҙың тормошо һәм ижады, эшмәкәрлеге өлгөһөндә уҡыусыларҙа, музейға килеүсе һәр кемдә хеҙмәткә һөйөү, тыуған илгә, тыуған төйәккә, телебеҙгә, туған халҡыбыҙға һөйөү тәрбиәләү музейҙың маҡсаты һәм бурысы булып тора.

1981 йылда район партия комитетының беренсе секретары М.Ғ.Баҡыевтың ихлас ярҙамы менән мәктәп музейы Ж.Ғ.Кейекбаевтың 70 йыллыҡ юбилейын билдәләүгә әҙерлек уңайы менән 8х6 метр ҙурлыҡ бүлмәгә күсте. 1992 йылда ғалимдың тыуған ауылы Ҡаранйылғала «Йондоҙ» колхозы идараһының ярҙамы менән (идара рәйесе К.Т. Мәүлетҡолов) Йорт-музей төҙөлдө. Йорт-музейҙың дөйөм майҙаны 144 кв.метр, дүрт бүлмәнән тора.

Музей асылған көндән башлап, йәғни 1974 йылдан бирле, уны тиҫтәләрсә мең кеше ҡарап өлгөрҙө. Музейыбыҙ районда ғына түгел, республика кимәлендә лә танылыу тапты. Уға ҙур ярҙам күрһәткән фән докторҙары, профессорҙар, академиктар — ғалимдың фәнни ҡараштарын үҙ иткән тоғро ҡәләмдәштәренә, дуҫтарына, шәкерттәренә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ.

Ул саҡтағы Мәғариф министры С.Ш. Йыһаншиндың ихлас ярҙамы эшебеҙгә көс-ҡеүәт өҫтәне. Фәҡәт ул эшләгән осорҙа күп төрлө саралар үткәрелгәнен хәтерләйем.

1999 йылдарға тиклем һәр йыл, мәктәптәрҙә уҡыуҙар тамамланғас та, уҡыусыларҙың район слеты уҙғарыла торғайны. Унда ҡатнашҡан йөҙәрләгән уҡыусыларҙың, шулай уҡ хужалыҡ етәкселәренең, белгестәрҙең, төрлө ойошма эшсәндәренең район кимәлендә уҙғарылған семинарҙа-



*Йорт-музейҙан күренеш*

рында ҡатнашыусыларҙың музейҙы ҡарауы һәйбәт йола булып алғайны. Бындай сараларҙы башлап, әйҙәп, һәр саҡ ихтирам менән ҡараған партия район комитетының беренсе секретары М.Ғ. Баҡыевты ла, Р.Ғ. Тәминдәровты ла йылы, яҡты уй-тойғолар менән иҫкә алам. Улар халҡыбыҙҙың рухи, мәҙәни булмышын аңлап эш итә белгән интеллектуаль зыялы заттар булғандар икән, тигән фекергә киләм.

Бынан тыш, юғары уҡыу йорттарын тамамлаған күп кенә уҡыусыларыбыҙ Ж.Ғ. Кейекбаев ижадына арнап диплом эштәре лә яҡлай. Ундайҙар хәҙер тиҫтәләп иҫәпләнә. Күп уҡыусыларыбыҙ, төрлө юғары уҡыу йорттарының филология факультетын тамамлағандан һуң, үҙ эҙмыштарын матбуғат, радио, телевидение менән бәйләне.

Бөгөн өлкән быуын кешеләренең фиҙакәрлек, үҙ-үҙҙәрен аямай эшләү өлгөләрен лайыҡлы дауам итә алырлыҡ, бөтә йәһәттән дә камил үҫешкән, әхлаҡлы, әҙәпле, хеҙмәт кешеләренә, бигерәк тә ижад кешеләренә ихтирам, һөйөү хисе менән ҡарай, баһалай белеүсе кешене тәрбиәләү иң етди бурыстарҙан һанала. Музейыбыҙ ошо йүнәлештә лә байтаҡ эш башҡара, тип әйтә алабыҙ.

Республикабыҙҙың Ишембай, Архангель, Ҡырмыҫҡалы, Миәкә, Учалы, Стәрлебаш, Мәләүез, Ейәнсура, Салауат һ.б. райондарының килгән уҡыусыларҙың, күрше Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеевский районының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының, Стәрлетамаҡ, Өфө ҡалаларының башҡорт гимназиялары уҡытыусылары һәм уҡыусыларының, Бөрө, Стәрлетамаҡ педагогия институты, БДУ уҡытыусыларының, талиптарының музейҙы ҡарағандан һуң яҙып ҡалдырған яҙыуҙары күпте һөйләй. Ошо яҙыуҙарҙың бер нисәһен килтереп үтәйек.

«Беҙ, Өфө ҡалаһы 13-сө интернатмәктәптең уҡытыусылары һәм уҡыусылары, мәшһүр ғалимыбыҙ, яҙыусыбыҙ һәм дәүләт эшмәкәре, халҡыбыҙҙың бөйөк улы Жәлил ағай Кейекбаевтың музейында булып бик шатландыҡ. Жәлил ағайҙың тормошо хаҡында күп нәмә белеп, ҙур ҡыуаныс кисерҙек. Ул беҙҙең өсөн милләтебеҙҙең Зәки Вәлидов кеүек бер йондоҙо. Был музейҙы башлап ойоштороусы һәм хәҙер ҙә етәкселек итеүсе Ғиндулла ағай Шәйәхмәтовҡа рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

*А. Бикмеева,*
*Камил Сиражетдинов һ.б. 24.05.95 й.*»

«Беҙ, Рәми Ғарипов исемендәге республика башҡорт гимназияһы уҡытыусылары, Ж.Ғ. Кейекбаев музейында булдыҡ, тулҡынландырғыс минуттар кисерҙек. Ғалимыбыҙ тураһында бай материал тупланған: уның тормошо, ижады, ғилми эшмәкәрлеген тулыһынса күҙалларға мөмкин.

*17.05.97 й.*»

«Хөрмәтле Ғиндулла Шириязданович!
Бөйөк ғалимыбыҙ, оло яҙыусыбыҙ Жәлил ағай Кейекбаев тураһында, уға арналған музей ойоштороп ғәжәп ҙур эш башҡарғанһығыҙ. Был айырым кешенең генә түгел, халҡыбыҙ мәҙәниәтен мәңгеләштереү өсөн ҙур өлөш булып тора.

*Ихтирам менән,*
*яҙыусы Ноғман Мусин. 17.02.90 й.*»

«Был музейҙы бик күрге килә ине. Экспонаттар мин көткәнгә ҡарағанда күберәк, байыраҡ булып сыҡты. Музейҙы ойошторған Ғ.Ш. Шәйәхмәтовтың эшен бик ҙур баһалайым. Артабан ошо музей нигеҙендә илде өйрәнеү музейы асып ебәрһәк тә килешер ине, тип уйлайым. Тағы ла бер килеп иркенләп ҡарарға өмөт итәм.

*Р. Солтангәрәев, С. Юлаев премияһы*
*лауреаты, яҙыусы. 1.08.89 й.*»

«Туған телдең мәңгелеге сағыла бында. Рәхмәт!

*Хәсән Назар. 21.11.89 й.*»

«В советской тюркологии имя профессора Дж.Киекбаева всегда останется в памяти его учеников, последователей и просто знавших его людей. Глубокие и интересные идеи Дж.Киекбаева до сих пор привлекают внимание последователей.

Музей памяти Дж.Киекбаева бережно хранит память о большом ученом и замечательном человеке.

Спасибо создателям музея и желаем успехов в вашем благородном деле.

*Профессор, заслуженный деятель*
*науки РСФСР и БАССР Р. Кузеев.*

*Профессор, заслуженный деятель*
*науки БАССР Н.Гатауллин. 21.01.81 г.*»